Лат-лат-лат

Өҫтәл артында Айбулат

Ҡа- ҡа-ҡа

Ашап ултыра бутҡа.

Ты-ты-ты

Сынаяҡты йә калаҡты

Та-та-та

Һәр саҡ яңылыш тота.

# Һүҙбәйләнештәр төҙө

| | |
|---|---|
| һөтлө | сәй |
| һалҡын | һөт |
| ҡайнар | аш |
| тоҙло | сәй |
| тәмле | ҡыяр |
| майлы | бутҡа |

# Составьте предложения

| | | | |
|---|---|---|---|
| | һөтлө | сәй | |
| Мин | һалҡын | һөт | яратам. |
| | ҡайнар | аш | |

# Составьте предложения

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | тоҙло | сәй | | |
| Мин | тәмле | ҡыяр | ашарға | яратам |
| | майлы | бутҡа | эсергә | |

# Икмәк

Икмәкте кем дә ярата:
Минең әсәй, атай ҙа,
Ағайым да, апайым да,
Өләсәй, олатай ҙа.
Тәмләп-тәмләп ашай уны
Һеңлем дә, энекәш тә,
Дуҫтарым да, әле миңә
Таныш түгел иптәш тә.

- Икмәк ил байлығы.
- Икмәктән оло булма.
- Икмәк аша атлама.
- Икмәктең валсығын да ергә ҡойма.

# Һүҙлек эше

- Ярата – любит
- Ашай – кушает, ест
- Эсә - пьет

- Яратмай – не любит
- Ашамай – не кушает, не ест
- Эсмәй – не пьет



Айрат һөт ярата. Айрат һөт эсә. Айгөл һөт ратмай. Айгөл һөт эсмәй.



Айгөл аш ярата. Айгөл аш ашай. Айрат аш яратмай. Айрат аш ашамай.



Айрат ҡоймаҡ яратмай. Айрат ҡоймаҡ ашамай.

Айгөл ҡоймаҡ ярата. Айгөл ҡоймаҡ ашай.



Айрат бутҡа ярата. Айрат бутҡа ашай.

Айгөл бутҡа яратмай. Айгөл бутҡа ашамай.